# СИЛӘБЕЛӘ —
## УҠЫТЫУСЫЛАР БӘЙГЕҺЕ

*4-6 апрелдә Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ибраһим урта мәктәбендә хәҙер инде традицияға әйләнгән туған тел уҡытыусыларының «Йыл уҡытыусыһы — 2002» конкурсы булып үтте. Унда быйыл да ғәҙәттәгесә Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондары уҡытыусылары көс һынашты.*

Һуңғы ваҡытта силәбеләр милләтте тергеҙеү эштәрендә ҙур әүҙемлек күрһәтә. Өлкә буйынса II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын ҡаршылап байтаҡ эштәр башҡарылды һәм быйылғы туған тел уҡытыусыларының бәйгеһе лә шуға арналғайны.

Икмәк-тоҙ — яҡты йөҙ, ти халыҡ. Ибраһим мәктәбендә был матур сара йола буйынса икмәк-тоҙ менән асылды, ҡунаҡтарҙы һәм ҡатнашыусыларҙы ололоҡлап ҡаршы алдылар.

Бәйге уҙғарыу буйынса алдан төрлө ҡараштар йәшәне: уңайлы урын һайлау үҙе үк уңыштың башы бит. Тәүҙәрәк данлыҡлы Бүре урта мәктәбе һайланған булһа, аҙаҡтан Ибраһим мәктәбендә туҡталдылар. Әйткәндәй, көслө базаһы булған Бүре мәктәбенең тупһаһын быға тиклем күп тапаны өлкәнең туған тел уҡытыусылары. Шуға ла был һорауға Ҡоншаҡ районының мәғариф бүлеге начальнигы Гөлбаныу Абдулла ҡыҙы Йәнтүрина ошондай аңлатма бирҙе: «Тик берәүҙәрҙең елкәһенә генә был эште һалыу бик ауыр булыр. Әйҙә, икенсе мәктәптәр ҙә эшләһен, уларға ла аралашыу һәм йәнлелек кәрәк бит». Быйдай ҡарар дөрөҫ, сөнки башҡа мәктәптәрҙәге педагогик коллективтарҙа туған тел уҡытыусыларының эштәре яңы көс һәм төҫ ала барыуын күрһәтеү ҙә ине был.

Бәйгене асыу Силәбе дәүләт университеты талиптарының юбилей концерты менән башланып китте. Жюри рәйесе, Силәбе дәүләт университетының дөйөм һәм төрки филология кафедраһы мөдире Ғәзел Камил улы Вәлиев быйыл бәйге бишенсе тапҡыр уҙғарылыуын һәм уның бәләкәй юбилей йылы булыуын билдәләп үтте.

Өс көн, өс төн барған, ти, бәйге. Эйе, хәс тә экиәттәгеләй өс тәүлек әйләнәһенә барҙы ярыш. Быйыл тағы ла көсөргәнешлерәк тә, ҡыҙығыраҡ та, файҙалыраҡ та булды, тип әйтергә мөмкин. Эксперимент рәүешендә өсөнсө көндә финалистар ҙур залда ҡунаҡтар, төрлө яҡтарҙан йыйылған уҡытыусылар менән яңынан дәрестәр уҙғарырға тейеш булдылар. Яңылыҡ итеп индерелгән һуңғы өсөнсө турҙың төп маҡсаты тураһында бәйгене ойоштороусыларҙың береһе — Флүзә Фәтҡулла ҡыҙы Ғайсина былай тине: «Финал дәрестәре икенсе көндә уҙғарылған асыҡ дәрестәрҙән шаҡтай айырыла, сөнки бында конкурсант ниндәйҙер бер тар тема һәм билдәләнгән дәрес ваҡыты менән генә сикләнеп ҡалмай. Ул бында тәҡдим ителгән тема буйынса үҙенең бөтә һәләтен һәм белемен асып



*Еңеүсе Миңлейә Манноновағa бүләктәр тапшырыла*

Ғәшер урта мәктәбе уҡытыусыһы, йәш белгес Миңлейә Маннанова 72 балл менән икенсе урында нығынды. Шулай итеп, конкурстың тәүге көнөнән алып үҙ-ара көсөргәнешле ярыш башланды, икенсе һәм өсөнсө көндәрҙә ул тағы ла сәмлерәк барҙы. Еңеүсе исеме өсөн көрәшкә Филиә Кәримова, Кәримә Сибәғәтуллиналар ҡушылды, һәм өс көн, өс төн барған көрәштә туған тел уҡытыусылары еңеп сыҡты.

Конкурсанттарҙың барыһы ла йәнле һәм йәмле дәрестәр күрһәтеүгә иреште. Уларҙың барыһы ла маҡтау һүҙҙәренә генә лайыҡ. Тимәк, өлкәлә туған телде уҡытыу эштәре алға бара тигән һүҙ был, талантлы уҡытыусыларыбыҙ бар!

Конкурсанттар менән әңгәмә барышында шул асыҡланды: быйылғы бәйге барыһына ла бик оҡшаған. Берәүҙәренә, әйтәйек, тест һорауҙары, икенселәренә асыҡ дәрестәр һәм финалда күрһәтелгән ирекле дәрестәр ҡыҙыҡлы күренгән. Бәйгелә ҡатнашҡан конкурсанттарҙың береһе лә ундағы сараларға битараф булманы. Һәр ҡайһыһы оло яуаплылыҡ, айырым бер ғорурлыҡ менән үҙҙәренең тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Үҙҙәрен презентациялағанда ла, педагогик концепцияларын яҡлағанда ла конкурсанттар барлыҡ һәләттәрен асып һалырға ынтылдылар.

Йәнле һәм матур аралашыу байрамына әйләнгән, тәжрибә уртаҡлашыуға ҡоролған сараның иң тулҡынландырғыс мәле килеп етте. Талапсан жюри ағзалары өс көнлөк эшкә йомғаҡ яһай, уларҙың төп

һалырға тейеш». Тәҡдим ителгән темалар ҙа үҙҙәренә күрә ҡыҙыҡлы булды: «Рәми Ғариповтың шиғри аманаты», «Мауыҡтырғыс тел», «Минең ырыуым», «Башҡорт телендә үҙләштерелгән һүҙҙәр», «Милли батырыбыҙ», «Башҡорттарҙың милли йөҙө». Ошондай дөйөм һорауҙар буйынса йәнле дәрес бирҙе конкурсанттар. Быйылғы бәйгенең яңылығы һәм әһәмиәте лә шунда булды. Алты сәғәт буйы көсөргәнешле, яңы фекергә ҡоролған дәрестәр ҡараны ҡунаҡтар.

Күҙәтелеүенсә, быйылғы бәйге йәштәрҙе йыйған. Мәғарифты үҫтереү институты методисы Светлана Ивановна Мельковская әйтеүенсә, бәйгелә 23 йәштән алып 34 йәштәрҙәге ун йылға яҡын педагогик эш стажы булған конкурсанттар ҡатнашты. Шулар араһынан 4 конкурсант — Силәбе дәүләт университетының башҡорт бүлеген тамамлаусылар.

Йәштәрҙең эше лә йәштәрсә икәнлеге теоретик һорауҙарға яуаптарҙа асыҡ күренде. Конкурстың беренсе турында теоретик һорауҙарға яуап биреүҙә Арғаяш педколледжы уҡытыусыһы Лилиә Әхмәҙиева 100 баллдан 80 балл йыйып лидерлыҡҡа сыҡһа, Ҡоншаҡ районы

маҡсаты — конкурсант-тарҙың хеҙмәтен ғәҙел баһалау. Өсөнсө турға сыҡҡан алты финалист араһынан беренсе урынды Силәбе дәүләт университетын тамамлап хәҙер Ҡоншаҡ районының Ғәшер урта мәктәбендә эшләй башлаған Миңлейә Маннанова яуланы, икенсе урында Арғаяш педколледжының уҡытыусыһы Лилиә Әхмәҙиева һәм өсөнсө урында Ҡоншаҡ районының Бәғәрәҡтамаҡ урта мәктәбе уҡытыусыһы Фидалиә Кәримова.



*«Туған телгә һөйөү тәрбиәләүсе» номинацияһында еңеүсе йәш белгес Кәримә Сибәғәтуллина финал дәресе уҙғара*

Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк: финалға сыҡҡан алты конкурсанттың өсөһө Силәбе дәүләт университетын тамамлаусылар. Был факт үҙе лә ошо уҡыу йортоноң лайыҡлы хеҙмәтен, юғары кимәлен күрһәтә. Ә инде тәүге тапҡыр өлкә күләмендә Миңлейә Маннанованың еңеүсе булыуы һөйөнөслө хәл, башҡорт бүлегенә 10 йыл тулыуға оло бүләк ул.

Бәйгелә бер нисә номинация билдәләнгәйне. Шулар араһында «Иң яҡшы дәрес» призы Закирова Гөлфирәгә, «Туған телгә һөйөү тәрбиәләүсе» призы Сибәғәтуллина Кәримәгә һәм «Йәшлек һәм педагогик перспектива» призы Ғималетдинова Нуризаға бирелде.

«Йыл уҡытыусыһы — 2002» еңеүсеһе Миңлейә Маннанова бәйгенән бик тә ҡәнәғәт. Үҙенең курсташтары һәм уҡытыусылары менән йәнә осраштырған сара өсөн уны әҙерләүселәргә оло рәхмәттәрен белдерҙе һәм киләсәктә лә ошондай файҙалы аралашыуҙар дауам итеүен теләне. «Мин бындай сараларҙа беренсе тапҡыр ҡатнашам, һәм конкурс хәтерҙә бер ҙур байрам булып ҡалды», — тине.

Беренсе урынды яулаусыға ҡиммәтле бүләк — төҫлө телевизор, икенсе һәм өсөнсө урын өсөн — магнитофон һәм саңһурғыс тапшырылды. Бынан тыш, призерҙарға юғары разряд категориялары бирелде.

Бәйгенең йомғаҡлау өлөшөндә етәкселәр ҙә ҡатнашты. Ҡоншаҡ районы хакимиәте башлығы Фәрит Иманғолов иң йәш конкурсантҡа аҡсалата премия тапшырһа, Башҡортостан Республикаһының Силәбе ҡалаһындағы даими вәкиле Мөхәмәтулла Хафизов барлыҡ конкурсанттарға китаптар бүләк итте. Шулай уҡ шағир Рамазан Шәғәлиев тә ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе һәм шиғырҙар уҡыны, ул майҙан хужаларына үҙенең яңы китаптарын килтергәйне. Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе Марат Камалов үҙенең сығышында конкурсанттарҙың киләсәктә лә бәйгеләрҙә берҙәм ҡатнашыуҙарын һәм эштәрендә уңыштар теләне. Юғары вазифалы етәкселәрҙең бәйгегә иғтибар биреүҙәре уның бәҫен тағы күтәрә төштө.

*Ҡамса МОРТАЗИН,*
*«Йыл укытыусыһы — 2002» конкурсының жюри ағзаһы,*
*«Ватандаш»тың махсус хәбәрсеһе.*